**Изге Яҙма һәр саҡ ҡулымда**

Раббым Ғайса, ҡөҙрәтең киң Һинең,
Минең өсөн Һин бөйөк мәрхәмәт -
Ғибәҙәттәр ҡылып Һиңә һыйынамын
Тик Һиңә генә, Раббым, мең рәхмәт!

Күңелемде шомдар биләп алһа,
Тынысланыр өсөн Һиндә юл табам.
Бар эшемде бер аҙ ситкә ҡуйып,
Ҡулыма мин Изге Яҙманы алам.

Йылдар һиҙҙермәй генә үтеп китә,
Йөрәктәге барлыҡ шомдар тарала.
Күптән борсоп килгән һорауҙарға,
Яуап, Изге Һүҙең аша табыла.

Изге Яҙма, иң түрҙә һәр саҡ ята,
Доға ҡылмайынса ҡулға алмайым,
Иртәләрем минең Унан башлана,
Кистәрен дә Мин Унһыҙ ятмайым.

Ауыр саҡтарымда йөрәккәйем янһа,
Изге Һүҙең булырминең ҡулымда.
Раббым Аллам, түҙемлек бирсе миңә,
Һүңғы көнгәсә булырға, Һинең юлыңда.